Абруйлы уҡытыусыны «ПолиТЭК» лицейы директорының фән буйынса урынбаҫары итеп тәғәйенләйҙәр. Мәктәптең методик советын етәкләй, уҡыу процесын үҫтереүҙә яңы юлдар, бәйләнештәр эҙләй. Балалар тәрбиәләүҙә белемен камиллаштыра, әле ул педагогика фәне буйынса диссертация өҫтөндә эшләй.

Үткән уҡыу йылы аҙағында Минзә Исҡужа ҡыҙына «ПолиТЭК» лицейының директоры вазифаһын ышанып тапшырҙылар. Етәксе булараҡ, тәжрибәле педагог ижади эҙләнеүҙәр юлында. Лицейҙа яңы дәрестәр индерҙе: бухгалтерия хисабы, эшҡыуарлыҡ һәм реклама. Был фәндәрҙе яңы ғына институт тамамлаған йәш белгестәргә тапшырҙы, ә үҙе — уларҙың методик етәксеһе, өйрәтеүсеһе.

— «Иҡтисад, экология һәм кеше» темаһына лицейҙа үтәсәк төбәк фәнни-ғәмәли конференцияһына Урал аръяғы райондары мәктәптәрен саҡырҙыҡ, китап сығарҙыҡ, еңеүселәргә лицей фондынан приздар тапшырҙыҡ, — ти директор.

Тыуған илдә барған демократик үҙгәрештәр, тирә-яҡ мөхиттең бөгөнгө торошо, халыҡтың социаль хәле — барыһы ла уйландыра тынғыһыҙ етәксене.

Минзә Исҡужа ҡыҙы һәр яҡтан да өлгөлө шәхес. Ул туған теленең яҙмышы тураһында тәрән борсола, ҡала күләмендә үткәрелгән милли сараларҙа, йола байрамдарында һәр саҡ әүҙем ҡатнаша, ярҙам итә. Милләтем, туған телем, илем тип йәшәй, балаларға әхлаҡи тәрбиә биреү тураһында ҡайғырта.

Тормош иптәше философия фәндәре кандидаты Латипов Әмир Йәнебәк улы менән Батыр исемле ул үҫтерәләр. Һөйкөмлө, хәстәрлекле әсә, алсаҡ хужабикә барыһына ла өлгөрә — уға һоҡланмау мөмкин түгел.

Бар бит халҡыбыҙҙың сая ҡыҙҙары: милләтебеҙҙең бай рухын үҙенә туплаған, киң күңелле, ихлас, заманса фекерле, ижади хеҙмәткә юл ярған етәксе кешеләребеҙ.

*Маргарет Эрсен-Раш:*

# « Мин һеҙҙең бер өлөшөгөҙ булдым...»

Һуңғы йылдарҙа республикала ғәрәп, төрөк телдәрен өйрәнеү яйға һалынды, ул телдәр менән шөғөлләнгән белгестәрҙе лә таный башланыҡ. Илдәр араһында фәнни, ғилми бәйләнештәр нығый. Үҙгәреш осоронда беҙҙең ғалимдарыбыҙҙың да Германияла, Францияла, Испанияла һәм башҡа илдәрҙә башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән дәрес биреп ҡайтыуҙары хаҡында матбуғат баҫмалары биттәрендә һирәкләп булһа ла хәбәрнамәләр күренгеләне. Бындай үҙгәрештәр йәмғәтселек тарафынан тәбиғи ҡабул ителде.

Ә бына төрөк теле уҡытыусыһы Маргарет ханым Эрсен-Раштың, үҙебеҙҙең ҡайһы бер милләттәштәр башҡортса сығыш яһай алмағанда, Беренсе Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы трибунаһынан саф башҡорт

телендә телмәр тотоуы күптәрҙе шаҡ ҡатырҙы. Һоҡландырҙы ла, тетрәндерҙе лә был ҡатын. Кем һуң ул Маргарет Эрсен-Раш? Ҡайҙа ул шулай таҙа итеп башҡортса һөйләшергә өйрәнгән?

Ата-әсәһе илгәҙәк ҡыҙына яратып Ингрет тип өндәшкән икән. Тыуған ере — Көнсығыш Германия. Ғаиләһе әле Ингретҡа 10 йәш тулғанда уҡ Көнбайыш Германияға ҡасып сыға ла артабан Төркиәгә күсеп китә. Атаһы Рудольф Раш Зонгулдак эргәһендәге бер заводҡа эшкә төшкәнлектән, ҡыҙына башланғыс төрөк мәктәбендә белем алырға тура килә. Оҙаҡламай уларҙың ғаиләһе яңынан Германияның Майндағы Франкфурт ҡалаһына күсенеп ҡайта. Милләттәштәре араһында Ингрет төрөксә һөйләшеүен онотоп та бөткән булыр ине, әммә алдынғы ҡарашлы, күп тел белеүҙең ғәмәли әһәмиәтен тойған Рудольф Раш ҡыҙына белемен камиллаштырыу урыны, аралашып йәшәрҙәй төрөк ғаиләһе эҙләй. Ниһайәт, Ингрет Шәрҡиәт институтына уҡырға инә, хатта 1962 йылда төрөк ғаиләһе менән таныша. Туғыҙ йәшлек төрөк малайы бер нисек тә уға Маргарет тип өндәшә алмай һәм уны Билге тип атай. Ошо икенсе исем Маргаретҡа шул тиклем ныҡ йәбешә, хатта яҡын ҡәрҙәштәре менән таныштары теленә лә күсә.

«Хөрриәт» гәзите (1969, 19 июнь): «Төрөксә әсә телендәгесә һөйләшкән немец ҡыҙы «Билге» Төркиәлә күргәндәрен Франкфурт радиоһына һөйләне... Яҡшы ниәт илсеһе гүзәл Маргаретҡа редакция, сит ил вәкиле күҙлегенән сығып, Төркиә тураһында нимә уйлауын белеү өсөн, яңынан Анатолия буйлап сәйәхәт ойошторасаҡ», — тип хәбәр итә һәм аҙаҡ уның 10 мәҡәләнән торған репортаждар серияһын баҫтырып сығара. Бына шулай Маргарет-Билге төрки донъяһында танылыу таба. Был сәйәхәт, минеңсә, уның киләсәк тормошона киң юл асҡан.


*Маргарет Эрсен-Раш*

Франкфуртта Төрөк халыҡ йортонда иптәштәре менән бергә талантлы ҡыҙ, Сивас, Газиантеп, Карс яҡтары милли кейемдәрен кейеп, төрөк халҡы бейеүҙәрен башҡарып йөрөй, йырҙарын өйрәнә, Төрөк Республикаһының киләсәге тураһындағы фәнни конференцияларҙа актив ҡатнаша. «Немец ҡыҙымын, әммә бала сағымдан уҡ үҙемде һеҙҙең бер өлөшөгөҙ кеүек күрәм», — тип яҙа төрки халыҡтары араһынан сыҡҡан дуҫтарына. Франкфурт университетында шәрҡиәт, ислам белеме һәм педагогия факультетын тамамлаған Маргарет төрөк теле грамматикаһы буйынса магистрлыҡ диссертацияһы яҡлап, Германияның Мюнхен, Бамберг, Франкфурт, Майнц, Гессен, Геттинген, Гамбург, Берлин университеттарында төрөк телен уҡыта. Төрөк егетенә тормошҡа сыға, улдары Каған төрөк һәм немец телдәрен «һыу кеүек эсә». Шулай итеп, телгә булған һөйөү халыҡҡа ла оло һөйөү уята.

Болгария профессоры Г.К.Лозановтың телдәрҙе интенсив өйрәнеү алымы, традицион алымдағыса яҙма телдәге ҡағиҙәләрҙе (фонетик һәм грамматик) файҙаланып, китапта яҙылғанды ғына уҡый белеүгә ҡоролмай, ә телде аралашыу сараһы итеп ҡарарға, йәнле һөй-

ләш, билдәле бер аралашыу ситуациялары аша ҡулланырға, үҙендә тулайым рәүештә шул телдә һөйләшкән халыҡ вәкиле итеп тойорға, актив һөйләшергә ярҙам итә. Мәскәү университеты профессоры Г.А. Китайгородская уны рус теленә яраҡлаштырғандан һуң, интенсив тел өйрәнеү алымы Рәсәйҙә йәшәгән башҡа милләт телдәрен өйрәнеүҙә ҡулланыла башлай.

Маргарет ханым үҙенең дәрестәрендә тап милләттең үҙе, халыҡтың бер өлөшө булып сығыш яһай, шунлыҡтан уның тәбиғи сафлығына, артислыҡ һәләтенә, һәр һүҙгә, һөйләмгә иғтибарлылығына, дәрестә ҡуйылған һорауҙарға теүәл яуап ала белеүенә, хаталанған талиптың яуабын уйнатып ҡына төҙәтә алыуына һоҡланмай мөмкин түгел.

Татар ғалимәһе Флүрә Сафиуллина Маргарет ханымдың төрөк теле дәрестәре хаҡында бик йылы уйтойғолар менән «Татарстан яшьләре»(1991 йыл, 27 апрель) гәзитендә былай тип яҙып сыҡты: «Бер дәрестә исемдәребеҙ, ғаилә, ата-әсә тураһында гәпләшһәк, икенсеһендә аҙна, ай, йыл фасылдары, ваҡыт төшөнсәләре, өсөнсөһөндә тороу урыны, дүртенсеһендә һөнәрҙәр, бишенсеһендә ашамлыҡтар, эсемлектәр, алтынсыһында транспорт һ.б. тураһында һөйләшергә өйрәндек. Шатлана-шатлана, ҡыуанаҡыуана, шаяра-шаяра, көлә-көлә үткән был дәрестәр мәңге күңелдә ҡалдылар. Һәр дәрес ниндәйҙер яңы мәғлүмәт, яңы һүҙҙәр, яңы һөйләм ҡалыптары, яңы ғыйбарәләр (һөйләм төҙөлөштәре. — *М.Б.*) алып килә. Хатта һинең нимәлер белмәгәнең дә оят түгел: яңылышыуҙы ла Маргарет ханым көлә-көлә төҙәтеп ебәрә. Дәрескә тәбиғи рәүештә ҡушылып, тиҙәйткестәр, төрөк халыҡ йырҙары килеп керә».

Флүрә Сафиуллина һүҙҙәренән шул аңлашыла: Маргарет ханым үҙенең дәрестәрен йәнле һөйләшеүгә ҡорған һәм телде халыҡтың мәҙәни һәм рухи байлыҡтары, этнографияһы, тарихы, ғөрөф-ғәҙәттәре, традициялары, хатта эмоциональ, әхлаҡи үҙенсәлектәре аша өйрәнеүҙе күҙ уңында тота. Уның талиптары ижади эҙләнергә, экспедицияларға йөрөргә, ерле халыҡ менән яҡындан танышырға, дәрес барышында аңлашылмаған һүҙҙәрҙең мәғәнәһен, хатта онотолоп барған иҫкеләрен иҫкә төшөрөргә мәжбүрҙәр. Һөҙөмтәлә уның талиптары юғары уҡыу йортон ғилми дәрәжә яулап тамамлай. Маргарет ханымдың үҙенә генә хас тағы бер эш ысулы бар — ул талиптарын билдәле бер телде төплө өйрәнгән белгес итеп үҫтерер өсөн шул милләттең телсе ғалимдарын дәрес бирергә саҡыра. Бындай осрашыуҙарҙың һөҙөмтәһе ифрат ҙур: уҡытыусы үҙе белемен камиллаштырып ҡала, борсоған һорауҙарына яуап ала, икенсенән, килгән кеше үҙе немец телен нығыраҡ өйрәнеп ҡайта, ә иң мөһиме — талиптарҙың йәнле һөйләшеүҙең манераһын, интонацияһын, һүҙ һәм һөйләм төҙөлөштәре үҙенсәлектәрен тойоп ҡалыуҙары...

Маргарет Эрсен-Рашты хәҙер полиглот тип атаһаҡ та була, сөнки ул бөгөн бөтә төрки телдәрендә лә иркен һөйләшә, яҙа ала. Башҡорт телен дә ул үҙ итте һәм ошо телдә телмәр торорлоҡ хәлдә икәнлеген ҡоролтай трибунаһынан танытты.

*Миңниса БАҺУМАНОВА.*